■ Әхлаҡ

# НИМӘ УЛ "БИСМИЛЛӘҺ"?



Бөрйән районы Ҡолғана ауылында "Үлмәҫбай хажи" мәсетенә йөрөүсе ағинәйҙәр

Ләйсән ФӘТҠУЛЛИНА

"Һәр эшенде "Бисмилләһ" менән башла", - тип өгөтләй кескәй ейән-ейәнсәрҙәрен тәжрибәле өләсәйҙәр. "Ятҡанда ла, торғанда ла, ишекте асҡанда ла, ятҡанда ла, ашһыу әҙерләгәндә лә "Бисмилләһ"те онотма", - тип өҫтәй улар. Ә ни өсөн "Бисмилләһ" һүҙен әйтеү мөһим икән, Был "тылсымлы" һүҙҙе әйтеү менән нимә үҙгәрә, уның мәғәнәһе ниндәй?

Иң тәүҙә, был кәлимәнең тәржемәһен асыҡлап китәйек. "Бисмилләһ" - ғәрәп теленән тәржемә иткәндә "Аллаһ исеме менән (башлайым)" тигәнде аңлата. Был һүҙҙең мөһимлеген күҙ алдына килтерер өсөн бер хикәйәне ҡарап үтәйек.

Ғәрәбстан сүллектәрендә илдәр гиҙгән, алыш-биреш яһаған кеше өсөн урындағы ырыу башлығының исеме менән йөрөү үтә мөһим булған. Юғиһә, яңғыҙы сәйәхәт иткән хәлдә, уға ҡараҡтарға һуғылмай, таланмай, имен-аман ҡайтып етеүе бик ҡыйынға төшкән. Бер ваҡыт ике кеше сәфәр өсөн сүллек буйлап сәйәхәткә сыға. Береһе оялсан, икенсеһе тәкәббер бер бәндә булған. Беренсеһе ҡәбилә башлығының исемен алған, ә икенсеһе үҙенең тәкәбберлегенә барып, кирелэнгән, ҡәбилә башлығының исемен алмаған. Ҡәбилә башлығының исеме менән йөрөгән кеше һәр ерҙә сәләмәт йөрөгән. Ҡараҡтар осраһа: "Мин фәлән түрәнең исеме менән йөрөйөм", - тип әйтеүе була, улар ҡурҡышынан үҙҙәре ҡаса икән. Ҡунаҡ булған ерҙәрендә лә уны тик хөрмәт кенә иткәндәр, тәмле аш-һыу тәҡдим иткәндәр. Ә тәкәббер кеше иһә сәфәр ваҡытында шундай ҙа бәләләргә осраған, аңлатып биреү ҙә мөмкин түгел. Һәр ваҡыт ҡурҡып йәшәгән, теләнеп йөрөгән, үҙен түбән төшөргән.

Беҙҙең тормошобоҙ ҙа шул сүллек кеүек. Ә беҙ, кешеләр, сәйәхәтселәр, ҡунаҡтар ғына. Кеше көсһөҙ зат, уның дошмандары һәм хәжәттәре - һанһыҙ. Шулай булғас, беҙҙең дә был донъяларҙың ысын хужаһы булған Аллаһ исеме менән эш итеүебеҙ урынлылыр. Шул ваҡытта беҙ бөтөн ҡурҡыу һәм ҡайғыларҙан ҡотолобоҙ.

Бөтә ғаләм, һәр яратылған әйбер үҙ телендә "Бисмилләһ" тип әйтә, бөтә барлыҡ Аллаһтың исеменә таяна. Саң бөртөгөндәй бәләкәй орлоҡтар Аллаһ исеме менән үҙҙәрендә иҫ киткес ҙур ағастарҙы һыйҙыра. Тимәк, һәр ағас "Бисмилләһ" әйтә. Ул ағастар беҙгә рәхмәт хазинаһынан емештәрен бирә.

Һәр һыйыр, дөйә, һарыҡ кеүек мөбәрәк хайуандар ҙа "Бисмилләһ" тип әйтәлер. Улар Аллаһ Рәхимлегенән урғылған һөт сығанағынан Ниғмәт биреүсе исеменән иң таҙа, саф ризыҡты беҙгә еткерә.

Һәр ағас һәм үҫемлектең ебәк кеүек йомшаҡ төптәре һәм тамырҙары "Бисмилләһ" тиер. Был тамырҙар ҡаты таш һәм тупраҡты тишеп үтә, "Аллаһ исеме менән" тип әйтәләр. Шулай итеп, ағастарҙың ботаҡтары һәм емештәренең үҫеүе, тамырҙарҙың ҡаты таш һәм тупраҡты еңеллек менән тишеп сығыуы һәм тупраҡ аҫтында ла емештәр биреүе, эҫе һауала япраҡтарҙың айҙар буйы ҡоромайынса тороуы материалистарҙың ауыҙына ҡул менән һуҡҡан кеүек бер дәлилдер.

Ғәләмдәге бөтә барлыҡ үҙ телендә "Бисмилләһ" тип Аллаһ исеменән беҙгә Уның ниғмәттәрен тәҡдим иткәс, беҙ ҙә "Бисмилләһ" тип әйтергә тейешбеҙ түгелме? Юҡҡа ғына өләсәйҙәребеҙ, оло йәштәрҙәге инәйҙәребеҙ беҙҙе: "Һәр эшенде "Бисмилләһ" менән башла, "Бисмилләһ" - һәр хәйерле эштең башылыр", - тип өйрәтмәгән икән. Ошо хаҡта онотмайыҡ.

■ Ислам әҙәбе

# ДҮРТ КӘҢӘШ

## "хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан

Ҡасандыр бер ваҡыт гонаһлы кеше йәшәгән. Ул үҙенә нисек кенә гонаһ эшләмәҫкә һүҙ бирһә лә, уны яман ғәҙәттәре һис нисек ташлап китмәгән. Һәм бына ул юғары белемле һәм Исламға ҡәтғи эйәреүсе кешене табырға ҡарар итә. Уға Ибраһим бин Әтһәмгә мөрәжәғәт итергә кәңәш биргәндәр. Гонаһлы кеше Ибраһим бин Әтһәмгә килеп, былай тип үтенгән:

- Мин үҙемдең насар ғәҙәттәремдән бер нисек тә арына алмайым. Миңә башҡаса гонаһ эшләмәҫкә кәңәш бирсе.

- Мин һиңә дүрт кәңәш бирәм. Әгәр ҙә һәр ваҡыт улар тураһында иҫендә тотһаң, ул сағында Аллаһы Тәғәлә һиңә насар ҡылыҡтан ҡотолорға ярҙам итер, - тип яуаплаған Ибраһим бин Әтһәм.

Был кеше бик шатланған һәм иғтибар менән тыңлай башлаған:

- Һиңә беренсе кәңәшемде бирәм, - тип башлаған Ибраһим бин Әтһәм. - Һин ҡайҙа ғына булһаң да, нимә генә эшләһәң дә Аллаһы Тәғәлә һине күреп тора.

- Минең икенсе кәңәшем: һин Аллаһ биргән аҙыҡты ғына аша. Шулай булмай бит инде. Уға ышанаһың, Ул биргән ризыҡтан туҡланаһың, һәм шул уҡ ваҡытта Уның ихтыярына ҡаршы бараһың, - тип дауам иткән ул.

Һәр бер кәңәштән һуң Ибраһим бин Әтһәм бер ни тиклем ваҡыт кәңәштәрҙең гонаһлының йөрәгенә барып етеүен көтөп торған.

- Ә өсөнсө кәңәш ниндәй, - тип һораған кеше.

Ибраһим бин Әтһәм тыныс тауыш менән һүҙ артынан һүҙ әйткән:

- Минең өсөнсө кәңәшем шул: һинең тағы ла гонаһ эшләгең килһә, һин иҫеңә төшөр, был донъя һәм унда булған бөтә нәмә Аллаһ Тәғәләнеке. Әгәр ҙә инде һин йәнә лә яңынан гонаһ эшләһәң, ул сағында һин нисек тә Аллаһы биләмәләрендә ҡалма, шунда уҡ үҙеңә икенсе урын эҙлә.

Был кеше дини кеше булған була, шуға ла ишеткән кәңәштәрҙән тотлоға башлай:

- Нисек инде, ҡайҙан башҡа урынға китәйем, бөтәһе лә Аллаһтыҡы бит.

Ибраһим бин Әтһәм уның күҙҙәренә ҡарап ҡысҡырып ебәргән:

- Ҡайһылай ҙа рәхмәтле була белмәү! Мәрхәмәтһеҙлек! Һин уның биләмәләрендә йәшәйһең, һәм һин үк уға ҡаршы барырға теләйһең. Әйтелгән һүҙҙәр был кешене ныҡ тулҡынландырған, һәм ул дүртенсе кәңәште һораған.

- Үлем сәғәте еткәс Ғазраил фәрештә һинең йәненде алырға киләсәк. Һин шул ваҡытта уға әйт: "Эй, Ғазраил! Һин ваҡытһыҙ килдең. Һин, мин гонаһтарыма тәүбә итеп бөткәс кил. Әлегә миңә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға һәм унан ғәфү үтенеүен һорарға кәрәк", - тип яуап биргән Ибраһим бин Әтһәм.

- Улай булмай инде! Мин нисек Ғазраилдан быны һорай алам, Ул миңә килгәндән һуң, мин инде бер ни ҙә эшләй алмаясаҡмын.

Ибраһим бин Әтһәм үҙенең нәсихәтен тамамлап, былай тигән:

- Эй, кеше! Беләһең бит, Аллаһ Тәғәлә һине күрә. Ул биргән нәмә менән туҡланаһың. Уның биләмәләрендә йәшәйһең. Үлем фәрештәһе килгәндә унан көтөп тороуҙы һорай алмаясаҡһың. Шуға ла әле Ғазраил (ғәләйһис сәләм) килмәҫ борон тәүбә ит. Ҡолға нимә ҡушылған, шуны эшлә. Аллаһ Тәғәләгә яҡынайырға, яҡшы әҙәпле һәм ғибәҙәт ҡылыусыларҙан булырға тырыш.

Ишеткән дүрт кәңәш гонаһ ҡылыусыны тулҡынландырған һәм ул ҡысҡырып илаған. Үҙенең гонаһтарына тәүбә итә башлаған һәм шул көндән башлап гонаһ эшләүҙән туҡтаған. Бөтә йәне һәм йыйылған мөлкәте менән Ислам хаҡына хеҙмәт итә башлаған. Ул үҙенең элекке таныштарын ташлаған, Ибраһим бин Әтһәмдең уҡыусыһы булып киткән һәм үҙенең белемен үҫтергән. Элекке гонаһлы булған мөхитте алмаштырып, тиҙҙән изге эштәр башҡара башлаған.

# Бөгөн сауап ҡылдыңмы?

Мосолман кешеһенең бурысы - выждан ғазабын кисермәй, Ислам ҡушҡанса йәшәү; гонаһтарҙан йыраҡ тороу, сауаплы, эштәр башҡарыу... Был - беҙҙең донъяға килеүебеҙҙең мәғәнәһе. Ләкин әҙәм балаһы сөкәммәл зат түгел шул. Кеше маҡсатына табан барған юлда абына ла, яңылыша ла, үҙе лә белмәҫтән хаталар эшләп ташлай. Кеше гел бер төрлө рухи хәләттә йәшәй алмай. Бер ҡарағанда, кешенең рухиәте өҫтөнлөк итә, ә икенсе ҡараганда, шул уҡ кешене өмөтһөҙлөк, рухи төшөнкөлөк, мәғәнәүи фәҡирлек алған була. Шул арала өмөтһөҙ кешеләрҙе һағалап ҡына йөрөүсе шайтан да килеп етә һәм әҙәм балаһының күңеленә вәсвәсә һала. "Һинең кеше буласағың юҡ. Был ҡәҙәр гонаһ ҡылғандан һуң, нисек итеп төҙәлергә уйлайһың, Мөмкин эш түгел был. Һин хәҙер шул гонаһлы тормошонда дауам итергә мәжбүрһең. Тәҡүәлеккә, игелекле тормошҡа ҡайтырмын тип уйлама ла", - тип бышылдап тора ул мөьминдең ҡолағына. Билгеле, мөьмин кеше лә шик-шөбһәгә төшә. Ошо урында был мәсьәләгә ҡағылышлы бер миҫал килтереп китеү урынлы булыр.

Ансарҙарҙан (Ансарҙар - Мәҙинә ҡалаһының абруйлы нәҫеле. Бәйғәмбәребеҙҙе (сғс) һәм беренсе мосолмандарҙы ҡабул иткән кешеләр) берәү Рәсулуллаһ янына килеп, үҙен борсоған бер хәл тураһында һөйләп бирә. "Мин үҙем дә һиҙмәҫтән гонаһ ҡылғанмын. Һуңынан бик ныҡ үкендем дә ул, ләкин уның ни файҙаһы бар? Хәҙер нимә эшләйем?" - ти. Бәйғәмбәребеҙ (сғс) шунда уҡ яуап бирмәй, сабыр итеп тора. Ниһайәт, уға вәхи килә һәм ул аят менән яуап ҡайтара. Аяттың мәғәнәһе былай: "Иртә һәм кис намаҙҙарынды (кәмселекһеҙ) уҡы. Унан һуң сауаплы эштәр ҡыл. Сөнки сауап, Ислам диненә хезмәт итеү гонаһтарҙы юҡҡа сығара, хаталарҙың ғәфү ителеүенә сәбәпсе була" ("Худ", 114). Был кеше әлеге яуаптан бик ҡәнәғәт булып йәнә һорай: "Йә Рәсүлуллаһ, был һүҙҙәр минең өсөн генәме, әллә һинең өммәтендәге бөтөн кешегә лә ҡағыламы?" "Юҡ һинең өсөн генә түгел, ул һәр кемгә ҡағыла. Гонаһ ҡылған һәммә кешегә", - тип яуап ҡайтара Бәйғәмбәр (сғс).




Бына шулай, ҡәрҙәштәр, яңылышлыҡ менән гонаһ ҡылған мосолман кешеһе өмөтһөҙлөккә бирелергә ашыҡмаһын, ә бәлки, сауаплы эштәр башҡарып, гонаһтарын юйырға тырышһын. Сәхәбәнең юғарылағы һорауын һәм Бәй-ғәмбәребеҙҙең (сғс) уға яуабын һәр ваҡыт иҫтә тоторға кәрәк. Инде был һөйләшеүҙе бер хәҙис менән тамамлайыҡ: "Ҡайҙа ғына булһаң да, Аллаһтан ҡурҡ! Кешеләр менән һыйышып йәшә, әхлаҡ эйәһе бул. Гонаһҡа керһәң, тиҙ генә сауаплы эштәр ҡыл. Ул сауаптар гонаһтарынды йыуып алып китһен!".